ТӘРБИӘ

Балаҫ һуғабыҙ бергәләп

Баймаҡ ҡалаһының "Толпар" балалар баҡсаһында "Мәктәпкәсә белем биреү учреждениелары тәрбиәләнеүселәрендә башҡорт халыҡ традициялары аша сәләмәт тормош образын формалаштырыу" республика инновацион майҙансығы булдырылған. Шуға күрә лә беҙҙең тәп мәҡсат – педагогик тәжрибә һәм инициативаларҙы үҫтереү, башҡорт халҡының ғөрөф-ғәҙәттәре, кәсептәре аша мәҙәни-тарихи ҡыҙыҡһыныуҙы арттырыу, халыҡ педагогикаһы нигеҙендә балаларҙа милли рух тәрбиәләү, белем биреү.

Бөгөн беҙ мәктәпкәсә әҙерлек төркөмө тәрбиәләнеүселәре менән балаҫ һуғырға өйрәнәбеҙ. Был уларға хеҙмәттең тормошта ни тиклем мәһим икәнлеген аңлатыу, балаларҙың шәхесен һәр яклап ижади үҫтереү, һәләтен арттырыу мөмкинлеген бирә.

Тәү сиратта тәп сеймал буларак, йәндең көнкүрештә файҙаланыу юлдарын өйрәндек, быйма баҫыу, шәл, ойоҡ бәйләү, балаҫ һуғыу тураһында видеоязмалар ҡараныҡ. Балалар менән йәндең составын өйрәндек, аҙаҡ уны бергәләп теттек, әүәләнек, паннолар һәм уйынсыҡтар эшләнек.

Бөгөн иһә балаҫ һуғыу буйынса аныҡ эштәр алып барыла. Тәүҙә тарихҡа байҡау яһаныҡ. Башҡорттарҙың быны өсөн теҫтәргә һәм орнаментҡарға ҙур иғтибар биреүе хаҡында мәғлүмәт бирелде. Уларҙы һуғыу технологияһы өйрәнелде.

Баласҡарҙы төрлө йөндәрҙән, тукымаларҙан эшләгәндәр. Буй һәм аҫалы баласҡар айырып ҡаралған. Аҫаба баласҡар башҡорт тирмәһенең йәме булған. Төрлө бизәктәр рәүешендә йөн ептәрҙән нағышлар һуғыла. Буй баласҡы һуғыу иһә күпкә еңелерәк. Унда сиратлап теге йәки был теҫтәге йөн еп йәки тукыма теҙеп сығыла.

Теҫтәргә килгәндә иһә, ҡара – беҙҙе туйындырған һәм йәшәткән еребеҙ, йәшел – йәшеллек һәм йәшлек, һары – ҡояш, күк һауа мәғәнәһен биргән. Сағыу ҡыҙыл теҫ – байрамды күрһәтә. Ошо матурлыҡтың асылы буй баласҡарға һалынып, ныҡлы, сифатлы тауар етештереү – үҙе бер ҙур эш, ғорурланып күрһәтерлек шөғөл булған.

Балаҫ һуғыу – ҡул менән тоҡоу техникаһын ҡулланып художестволы әйберҙәр әҙерләү. Традицион был шөғөл ваҡыт үтеү менән кәсепкә әйләнгән. Уның өсөн һарыҡ йөнөн йәки кәҙә дебетен ҡулланғандар. Баласҡы горизонталь станок-урында һуҡҡандар. Борон уның өсөн тәбиғи теҫтәр ҡулланғандар – аҡ, һоро, көрән. Шулай уҡ тәбиғи буяуҙарға манылған ҡыҙыл, һары, йәшел һәм башҡа теҫлә ептәр ҡулланылған. XIX быуат баштарында анилин буяуҙар файҙаланыла башлағас, теҫтәр гаммаһы байыған. Баласҡы тирмә йәки йорт стеналарына элгәндәр. Аҫалы баласҡар бирнәгә ингән.

Балаҫ һуғыу һарыҡсылыҡ өҫтәнләк иткән төбәктәрҙә киң таралған. Был кәсептә ҡайтанан тергеҙеү, үҫтереү өсөн бер ниндәй ҙә яңы нәмә уйлап сығарырға кәрәкмәй. Милли кәсеп боронғолоғо, быуаттар буйы һаҡланып килгән бизәктәре, аҫалары һәм ошоға бәйле йолалары менән ҡиммәтле.

Бөгөн төрлө яҡтарға ял итергә барғанда һәр кем шул ерҙең үҙенсәлегән, тарихын, мәҙәниәтен сағылдырған әйберҙе күргеһе, иҫтәлеккә алып ҡайтҡыһы килә. Ниндәйҙер заманса, бәлки, ҡайһылыр сиктәр буйынса камил булған тауарҙар бер кемдә лә ҡыҙыҡһыныу уятмай. Шулай булғас, башҡорт баласы республиканың бренды булырға лайыҡлы матурлыҡ һәм ул үҙенә иғтибар талап итергә хоҡуклы.

Бөгөн беҙ тәрбиәләнеүселәребеҙ менән урынғас (станок) менән балаҫ һуғырға өйрәнәбеҙ икән, башҡорт халҡының боронғо кәсебен, шөғөлөн, тарихын тергеҙәбеҙ, тигән һүҙ. Мәктәпкәсә йәштәге балалар өсөн методик яҡтан дөрөҫ уйланылған дәрес-күнегеүҙәр халҡыбыҙҙың традицияларына һөйөү тәрбиәләй, ҡыҙыҡһыныу уята. Был иһә уларҙың төрлө яклап үҫешен тәьмин итә, ижади һәләттәрен байыта, тел-һүҙ байлығын арттырыуға булышлыҡ итә. Эш тәжрибәмдән сығып шуны әйтә алам, тап ошо йәштәге балаларҙа "мин"ләлек үтә лә ҙур. Шунлыҡтан хеҙмәт аша дөрөҫ йүнәлеш бирep, уларҙы һәр яклап үҫешкән шәхес итеп тәрбиәләү – иң отошло алымдарҙың береһе.

Рәзеда САДЫҠОВА,
"Толпар" балалар баҡсаһы тәрбиәсеһе.